# «Донъя миңә яңы яраламы?..»

*Нимә һуң ул шиғриәт? Ниндәй көс уны йәшәтә? Быуаттар моңо, халык зарымы? Назар Нәжми әйтмешләй, юғары һыҙланыуымы ул? Әллә бер мәлдә токанып һүнгән ғишык нуры, ғүмерлек мөхәббәтме?*

*Кешелек аңында быуаттар буйына һакланып, безгә йәдкәр итеп тапшырылған изге комарткы ул — шиғриәт.*

*Хоҙайҙың рухыбыҙға индергән бөйөк йәшәү көсөләр ул — шиғриәт.*

*«Башкортостан кызы» журналының баш мөхәррире, шағирә Йомабикә Ильясова менән әңгәмәбеҙ ҙә шул мәңгелек сер — шиғриәт хакында булыр.*



**— Йомабикә, яҙмыш кушыуымы икән, ҡайҙа ғына эшләһәк тә, бына утыҙ йыллап инде беҙ тормош мәғәнәһен әҙәби ижадта күрәбеҙ, уны күңел бурысыбыҙ итеп алғанбыҙ. Һин һәр ваҡыт шиғри аһәңгә тоғро ҡалдың. Нескәләрҙән-нескә, ололарҙан-оло шиғриәт хаҡындағы фекерҙәрең менән уртаҡлашһаң ине.**

— Яңыраҡ Шекспирҙың сонеттарын уҡыным. Күпме быуат үткән, ә һәр сонетта бөгөнгө көн ярылып ята. Шекспир бөгөнгө көндә ултырып яҙғанмы ни! Шиғырҙа иң тәүҙә хис, мәңгелек ҡиммәттәр өҫтөнлөк итә. Шуға ваҡыт үтә күренмәле бер сик һымаҡ унда. Дөйөмләштерелгән шиғыр, сәйәси ҡараш белдергән шиғриәттә, бәлки, улай уҡ түгелдер. Ысын, саф шиғриәт өсөн ваҡыт төшөнсәһе юҡ.

Шиғриәт — талант емеше генә түгел, ул зиһен көсөргәнешенән аҡылдан яҙыу сигенә етеп, башҡалар күрмәгәнде абайларға ынтылыу. Хатта ябай уҡыусыға был һаташыу һымаҡ тойолорға мөмкин. Дөрөҫ кенә шиғыр ҡыҙыҡ түгел! Ҡайһы берҙә: «Был нимә һуң?» — тип үҙең дә нимә яҙғаныңа аптырайһың. Шиғырҙың бөтә мауыҡтырғыслығы, илаһилығы, буй еткеһеҙлеге шунда. Ә «тейеш-мейеш»тәрҙе күп уйлаған кеше тәбиғәттән шағир түгелдер, тип уйлайым.

**— Иосиф Бродский ижады һымаҡ интеллектуаль шиғриәт тураһында ул ваҡытта һин ниндәй фекерҙәһең?**

— Аҡылдың сикһеҙлегендә йөҙөү! Юғары кимәлдәге фекерләүгә күсеү. Мостай ағайҙың бер шиғырына нык һоҡланып: «Ошолай ҙа яҙып буламы икән ни, нисек Һеҙ шулай уйлай алаһығыҙ?!» — тигәс, ул: «Эй, һаташыу инде был», — тигәйне. Ә ул — бөйөк шағир.

Ғөмүмән, бүтән телдәргә тәржемә итеп күрһәтерлек, башҡа милләттәрҙә ҡыҙыҡһыныу уятырлыҡ шиғриәт хис менән фекерҙең тығыҙлығынан тора. Фекер хистән тыуа. Мәғәнәне тәржемә аша биреү тойғоно сағылдырыуҙан еңелерәк. Ошо яғы ла отошло.

Минеңсә, шиғриәт — йәшәйештә төҙәтеп булмағанды төҙәтергә ынтылыу, юғары ғәҙеллеккә, камиллыҡҡа ирешеү теләге һәм шуны тормошҡа ашыра алмауҙан яраланған күңел, мәңгелек һыҙланыу. Кешеләр шиғриәттә шуны күрә лә автор хаҡында ла: «О, ул шундай һәйбәт кеше икән!» — тип уйлай. Әммә ябай бәндә, хатта шағир ҙа изге була алмай. Был мөмкин дә түгел. Шиғыр — саҡ ҡына ҡолаҡҡа салынып ҡалған моңдо ишетеү, ул барыбер ҡайҙандыр килә. Ҡайҙан?.. Бынныһы ла — йыһан сере.

**— Йомабикә, бер һорау күптән йөрәгемде тынғыһыҙлай. Башҡорт шиғриәте «тылсымлы», «сихри», «арбалыу», «ғәжәпһенеү» кеүек һүҙҙәр менән тулған. Уҡыусыны ысынбарлыктан ситкә алып китеү түгелме икән бындай ҡараш? Былай ҙа бит халҡыбыҙ һуңғы йылдарҙа илдә барған үҙгәрештәргә яраҡлаша алмай йонсой...**

— Ғәжәпкә ҡалмаған, аптырамаған, сабыйҙай тетрәнмәгән кеше яҙа аламы? Донъяны балаларса бер ҡатлылыҡ ҡотҡарыр, тигән Достоевский.

Ерҙең тартыу көсө Ньютонға ҡәҙәр ҙә булған. Барҙың серен генә асҡан ул. Шағирҙар ҙа шулай. Һәр ижадсы өсөн донъя яңынан ярала. Минең бынан ун йыл элек яҙылған бер шиғырым тап ошо фекер менән башлана:

Донъя миңә яңы яраламы,
Түңкәрелеп, ҡупҡанмы ҡиәмәт,
Селпәрәмә килә табынғаным,
Ни ҡәҙерле миңә, нимә ҡиммәт?

Һин донъяны үҙеңә нисек асаһың, үҙең генә нисек ғәжәпләнәһең, тетрәнәһең — шулай яҙаһың. Һәм бына һинең ошо тетрәнеүең тағы ла кемдәрҙеңдер күңеленә ауаздаш булһа, улар һинең уҡыусыңа әйләнә. Уҡыусыларҙың бик аҙ булыуы ла ихтимал. Мин үҙем шиғриәттең кимәлен популярлыҡ менән генә билдәләмәйем.

Жорж Санд бер яҙыусыға хатында: «Хәҙер Һеҙҙең исемегеҙ һәр ерҙә яңғырай һәм Һеҙ шулай модала булған өсөн генә Һеҙҙе кешеләр уҡыясаҡ, ә бик әҙҙәр генә Һеҙҙе аңлаясаҡ, унан да әҙерәктәре яратасаҡ», — тип яҙған.

Шағирҙар күп. Йәшәү асылы бер. Бөтөнләй әйтелмәгән һүҙ, бәлки, юҡтыр ҙа. Ҡайһы саҡ мин үҙем, бары тик үҙем генә йәшәй-йәшәй, уйлай-уйлай килгән фекеремде уҙған быуаттарҙа яҙылған әҫәрҙәрҙә осратам. Ҡыйын була. Сөнки һәр табыш буш урында тыумай, уның нигеҙендә һинең көсөргәнешле күңел хеҙмәтең һәм зиһен эшмәкәрлегең ята. Бәлки, даһиҙар ғына үҙ һуҡмағын яра алалыр. Талантлы йәки ябай шағирҙарҙың һуҡмаҡтары ҡушылып, буталып бөтәләр. Һыуҙа ла бит эҙ ҡалмай, эҙ ҡалыуы түгел, һыуҙың булыуы мөһим. Бәлки, шиғриәт тә шулайҙыр.

**— «Япраҡ» тигән шиғырыңдан этәреш алып, һорау ҡуйғым килә:**

**Тын ҡалған ел ҡапыл**
**Көрһөндө япраҡта,**
**Япраҡ ҡалтыранды,**
**Көҙ ине ян-яҡта...**

**Ғүмер үтеү менән,**
**Ошо япраҡ ише**
**Һәр нәмәне тоя**
**Һәм тетрәнә кеше.**

**Ниндәйҙер матур һүҙҙәр эҙләп тороу ҙа юҡ бында. Шундай ябай әйтелгән. Ә һәр кеше кисергән хис-тойғолар һалынған. Ни өсөн беҙ үҙ эсенә ҙур мәғәнә һыйҙырған ябайлыҡҡа ғүмер буйы ынтылабыҙ һәм уға шулай һуң киләбеҙ икән?**

— Ҡайһы бер шиғыр романдарға тиң. «Иностранная литература» журналында берәү, Шекспирҙың сонеты Толстойҙың «Һуғыш һәм солох»ынан ҡыҫҡараҡ түгел, тип яҙғайны. Ошоно аңлаған кешеләр күберәк булһын ине. Әммә һәр шиғыр ундай шәплеккә дәғүә итә алмай. Шиғырҙар бит бер-береһенә эйәреп тыуа. Үҙемә килгәндә, тәүҙә күнекмә яһаған кеүек кенә яҙыша башлайым. Ярай, мин әле тауға менә генә башланым, тип намыҫым алдында аҡланам. Тотоп ҡына шәп нәмә яҙып булмай. Ә бит ошо күнекмәләрҙең оятын да күтәрергә кәрәк! Ҡайһылыр шиғыр — бейеклек, ҡайһыһылыр — уға барған юл. Ни хәл итәһең, бер генә ижад та шау уңыштарҙан тормай. Йылдар буйы килгән тәжрибә, оҫталыҡтың да әһәмиәтен онотмайыҡ.

Ижадтың бөтә тәме, бөтә кинәнесе, мәғәнәһе — ана шул ҡайһы бер нәмәләрҙе әйтә алып ҡыуаныуҙа. Мин ошоно эшләй алдым, тип үҙ-үҙеңә ышаныу һиңә артабан яҙырға көс бирә.

**— Әле һин яңы китап өҫтөндә эшләнең. Цветаева әйтмешләй, «О если бы знали, из какого сора растут стихи, не ведая стыда!» Шуға оҡшаш хистәр кисерҙеңме?**

— Был һүҙҙәрҙе ике мәғәнәлә аңларға була. Бәлки, Цветаева үҙенең ҡараламаларын да күҙ уңында тотҡандыр. Әлбиттә, ҡайһы саҡ шиғыр тормоштағы түбәнлектән дә тыуа. Бер тапҡыр мин, инде нимәгә төбәлеп, ни яҙайым, тип ултырғанда, өйҙә себен осоп йөрөгәнен күреп ҡалдым. Тиҙ генә ошо юлдарҙы теркәп ҡуйҙым:

Ҡоштар ғына түгел, оса
Себен,
Хәтерләтеп осоштоң да
Сүбен.

Шиғырға сумғанда, йәнем икегә бүленә. Эшем дә бар. Ғаиләм дә бар. Тормошта яҡты, ҡараңғы яғың, көн менән төн һымаҡ, тәбиғи алмашынып килә. Шиғриәт менән йәшәгәндә, бар яҡтым ижадҡа күсә лә, бар ҡараңғым яҡындарымды, хеҙмәттәштәремде яфалай. Был бик

ауыр. Мин бит булмышым менән кешеләрҙе рәнйетергә яратмайым. Ғәҙәти тормошомда үтә аяулымын. Ижад йорттары шуның өсөн дә кәрәктер ул.

**— Ни өсөн күп ир-ат яҙыусылар һымаҡ, ижад йортона барып, бөтә көндәлек ығы-зығынан азат булып яҙыуҙы үҙеңә рөхсәт итмәнең? Ҡатын-ҡыҙ булған өсөнмө?**

— Бер яҡтан, мин ниндәй шарттарҙа йәшәйем, шул шарттарҙа яҙып өйрәнгәнмен. Мәҫәлән, Черниковкала йәшәгәндә, автобус халыҡ менән шығырым тулы, этеш-төртөш, һәм шунда ҡыҫылып торған хәлдә мин уйым менән шиғриәттә онотола торғайным. Шуға ла мин шиғырҙарымды әле лә күңелдә яҙам, аҙаҡ ҡына ҡағыҙға күсерәм.

Шиғыр һәр ваҡыт минең ҡотҡарыусым булды. Шиғыр яҙғанда, үҙемә ихтирамым, ышанысым артты, аяҡ аҫтымдағы ер нығынып киткәндәй тойолдо. Бүтән эштәр, хатта мөхәррир булыу ҙа, быны бирә алмай. Шиғыр яҙыу күңелде нығыта, таҙарта.

Ябайлыҡ һәм тәрәнлек йәшәй-йәшәй килә тиһәк тә, йәш саҡтағы, шул автобуста тыуған шиғырҙар эскерһеҙлеге менән матур. Ғүмерҙең һәр дәүере ижадта үҙенсә сағыла.

Әсәй, ҡатын булараҡ, ғаиләм өсөн йәнем тыныс саҡта ғына ижадҡа бирелә алам. Шуның өсөн дә үҙ өйөм әле һаман берҙән-бер илһам мөйөшө булып ҡала.

**— Йәшлек илһамы хаҡында һөйләшкәс, һинең тәүге шиғырҙарың иҫкә төшә. Ижадың тыуған яғыңдан, һине үҫтергән, тәрбиәләгән халыҡтың донъяны ҡабул итеүенән киләлер?**

— Хәйбулла районының Аҡъюл ауылы минең өсөн бер ҡасан да ғәҙәти генә ауыл булманы, бәлки шунда тыуып, донъяны шунда асҡанғалыр. Әлегәсә йөрәктәге иң изге әкиәт ул. Ғәжәйеп тәбиғәт. Кешеләрҙең холҡоноң һыҙаттары ла үҙенсәлекле. Башҡа ерҙә руль артындағы кеше юлға ҡараһа, беҙҙә ҡаршыға килгән машина эсенә ҡарап киләләр. Балаларса ҡыҙыҡһыныу һәм бер ҡатлылыҡ, иҫ китмәле күңел киңлеге һәм йомартлыҡ. Сабыр, тыныс көнитмеш.

Мин дә ошо кешеләр кеүек үк ихлас һәм ҡаты бәғерлелек алдында ҡаушап ҡалам, беҙҙә уҫаллыҡ юҡ. Беҙ тәрәндән тоябыҙ, әммә был хаҡта өндәшмәйбеҙ. Күндәм һәм түҙемлебеҙ. Яҡшымы, насармы — шундайбыҙ. Мин ата-әсәйемдән генә түгел, Аҡъюлдан, уның тау-урманынан һәм халҡынан яралғанмын. Шуға ла ауылымды оло һөйөү менән яратам. Унда ғына ер һулышын тыңлай һәм йыһанды тоя алам. Бүтән төбәктәр миңә үҙ серен асмай.

Ай һәм ҡояш ниндәй матур пар ҙа,
Мәңгелектәр бүлгән.
Хикмәт шунда: береһе янһын өсөн
Икенсеһе һүнгән, —

тип яҙғанмын икән, был юлдар, моғайын, бала саҡта әсәйем һөйләгән ҡарһүҙҙә ике ҡояш булыуының күңелемә һеңеп ҡалыуынан да тыуғандыр. «Һыуһылыу һағышы» исемле һәм бүтән шиғырҙарымда ла халыҡ ижады йоғонтоһо бар. Әммә мин фольклорҙан туранан-тура, ҡайын

туҙын һыҙырған һымаҡ алып, шунда халыҡсанлығын күрһәтергә ынтылыуҙы өнәп бөтмәйем. Был — өйрәнсеклек баҫҡысы.

**— Әҙәби тәнҡит йәһәтенән үҙ ижадыңа ҡарата иғтибар менән ризамы һин? Һине аңлаған тәнҡитселәр бармы?**

— Муса Ғәли ағайҙың ижадыма ҡарата йылы һүҙ әйтеүе ҡәҙерле булды. Ижадҡа намыҫ эше итеп ҡараған, мөмкин тиклем юғары кимәлдә яҙырға тырышҡан кеше үҙе лә, тәнҡитләйҙәрме, тәнҡитләмәйҙәрме, үҙенә эске талап ҡуя. Ләкин артабан ышаныслы яҙышыр өсөн дәртләндереү ҙә кәрәктер, тип уйлайым. Мәҫәлән, һәр йыйынтығымды нәшриәткә тапшырғандан һуң шағирә икәнлегемә шикләнә яҙып ҡуям. Ижад кешеһе өсөн былдай төңөлөүҙәр тәбиғи. Данлыҡлы артист Вячеслав Тихонов та «Һуғыш һәм солох» фильмында төшкәндән һуң: «Башҡа киноға төшмәйәсәкмен, Болконскийҙы аса алманым», — тип бик бөтөрөнгән.

Минең ижадыма иғтибар күрһәткәндәре өсөн оло ғалимыбыҙ Ғайса Хөсәйенов менән шағирә Таңһылыу Ҡарамышеваға ла бик рәхмәтлемен. Ә дөйөм алғанда, ижади һөйләшеүҙәр әҙәйҙе һәм һайығайҙы. Уҡыусыны әҙәбиәтте ҡабул итеүгә әҙерләү ҙә кәрәк бит. Мин, мәҫәлән, Кафканың бер әҫәрен уның хаҡында мәҡәлә уҡығас ҡына аңланым. Сөнки беҙ традицион проза уҡыуға күнеккәнбеҙ. Ошондай мохтажлыҡ бүтән кешелә лә булыуы ихтимал. Бәлки, минең «Гамлет монологы» исемле шиғырымды ла уҡыусыға аңлатып еткереү кәрәктер. Быны бит мин үҙем эшләй алмайым.

Ғөмүмән, әҙәбиәт тәрәндән өйрәнелергә тейеш. Психологтар, Достоевскийҙы күсереп яҙып, үҙ фәндәре буйынса белемдәрен камиллаштырғандар. Ницше Достоевскийҙың ҡайһы бер әҫәрҙәрен конспект итеп яҙып өйрәнгән. Фрейд та Достоевский менән бик ҡыҙыҡһынған. Шиғриәт тә, күңелдең йәнле хәрәкәте булараҡ, психологтарға һәм философтарға бик күп мәғлүмәт бирә ала.

Шиғыр — шағир ғүмеренең ҡағыҙҙа теркәлгән иң сағыу мәле, үҙе был донъянан киткәс тә, кисерештәре кешелеккә мираҫ булып ҡала.

Тәнҡиттең бер яҡлы ғына ҡараштa булыуы, «һәйбәт, халыҡсан» тигән генә баһа ҡуйыуы әҙәбиәттең офоғон тарайта. Матбуғат биттәрендә бөгөнгө донъя кимәлендә беҙҙең кеүек айырылып ҡалған әҙәбиәттәр бармы, улар нисек йәшәй — шундай һөйләшеүҙәр күрге килә.

**— Индеецтарҙың резервацияһындағы кеүек, үҙ әҙәби мөхитебеҙҙә генә ҡайнашыу беҙгә рәхәт тә ни... Бер ниндәй буй етмәҫ критерийҙар ҡуймайбыҙ, үҙебеҙгә үҙебеҙ һоҡланып тик йәшәйбеҙ. Ә халҡыбыҙ уҡымышлы бит, төрлө телдәрҙәге әҫәрҙәрҙе уҡый, сағыштыра.**

— Беҙ көн-төн халыҡ тип һөйләйбеҙ. Ләкин халыҡ көслө булһын өсөн сәнғәт, әҙәбиәт көслө булырға тейеш. «О, башҡорт теле!» тип яҙылған шиғыр инглизгә кәрәкмәй. Мостай ағай: «Башҡорт телен яратыу — башҡортса талантлы шиғыр яҙыу ул», — ти торғайны. Ҡурай, тыуған яҡ тураһында яҙмаһаң, һиңә бер миссияңды үтәмәгән һымаҡ ҡарайҙар. Халыҡтың хазинаһы шул ғынамы ни? Ошо сикләнгәнлек арҡаһында тотош халыҡ ижады, халыҡтың боронғо асылы, хатта асылып та бөтмәйенсә, юғалып бара түгелме һуң? Аҡ шиғырға ҡаршы сығабыҙ, ә ниңә һуң яҙып ҡарамаҫҡа, әгәр ул үҫешкә хеҙмәт итһә. Йәштәргә теләгем: донъя әҙәбиәте тигән ҙур кимәлдән ҡурҡмай, үҙҙәренә

юғары талап ҡуйып ижад итһендәр. «Беҙ шәп!» тиеү генә етмәй. Венгр әҙәбиәте изоляцияла булған, донъя әҙәбиәтенә сығып, улар даирәһен киңәйткән. Хатта айырым шәхес уңышҡа ирешер өсөн уңышһыҙлыҡтар аша үтә. Ә бында тотош милләт, тотош әҙәбиәт яҙмышы хаҡында һүҙ бара. Уйланырға урын бар беҙгә.

**— Бәлки, циклон — антициклон ҡанундары әҙәбиәттә лә йәшәйҙер ул? Йәштәр килмәй, тип борсолоу бушҡа түгелме икән?**

— Яҙыусының абруйы, матди хәле шәп саҡта әҙәбиәткә барыбер вазифаға ынтылған кеүек килеүселәр ҙә булған. Ә хәҙер, киреһенсә, күберәк таланттар килер, тип уйлайым.

**— Йомабикә, һинең Бөйөк Ватан һуғышы хаҡында шиғырҙар яҙыуың миңә бер аҙ ғәжәп тойолдо...**

— Атайым һуғышта ҡатнашҡан, икенсе төркөм инвалиды, Сәлихйән олатайым беренсе төркөм инвалиды, бер аяҡһыҙ ҡайтҡан. Саҙретдин ағайым өсөнсө төркөм һуғыш инвалиды. Хәҙер өсөһө лә мәрхүмдәр инде. Иҙрис ағайым да һуғыш яраларынан иртә үлеп китте. Иң бәләкәйҙәре Йомабай ағайым (уның исемен миңә ҡушҡандар) һуғышта ятып ҡалған. Әсәйемдең дә бер туған ҡустыһы Шаһимәрҙән ағайым фронтта һәләк булған. Бәлки ошондай ғаиләлә үҫкәнгәлер, һуғыш фажиғәһе — минең күңелемдә. Шаһимәрҙән ағайымдың тол ҡалған ҡатынына арнап «Байрам» тигән шиғыр яҙҙым. Еңгәм ағайым һуғышҡа киткәндә, ғаиләлә бер-ике ай ғына йәшәп, ауырлы булып, өләсәйем менән генә тороп ҡала. Ул минән йыш ҡына: «Бикәс, нишләп һаман кейәүгә сыҡмайһың», — тип һорай торғайны. Мин уға, 16 йәштә кейәүгә сыҡҡан кешегә, ныҡ оло күренгәнмендер, күрәһең. «Нимәһе бар инде уның?» — тигән булам. «Эй, үбешеп кенә йоҡлап китәһең, үбешеп кенә килеп уянаһың», — ти ул. Был уның бәхет тураһында ғүмер буйы йөрөткән хыялы. Өләсәйемде бик ихтирам итте, ғүмер буйы бергә йәшәнеләр. Өләсәйем һуҡырайғас та уны ҡыҙы кеүек ҡараны. Һәммәһе лә иҫ китмәле саф, эскерһеҙ кешеләр. Береһе лә хәҙер был донъяла түгел, мин уларҙы бик һағынам.

**— Мәҡәләләреңдең теле һутлы, хисле, улар фекергә лә бай. Проза әҫәре яҙып ҡарарға теләгең юҡмы?**

— Юҡ. Проза минең булмышыма тап килмәй. Минең фекерләүем дә шиғыр кеүек өҙөк-өҙөк. Мин үҙемде яҙам. Ә проза дөйөмләштереүгә ҡорола. Драма яҙа алыр инем. Яҙырмын да, тип ниәтләйем. Берәй ваҡиға күсөргәнешкә әйләнгәндә: «О, спектакль башланды!» — тип уйлайым. Ҡайһы ваҡыт күңелемдә пьеса геройының монологтары ла тыуа. Шиғриәттең баһаһын төшөнөп етмәгән уҡыусы уны прозанан түбән ҡуя. Бер бөйөк кеше: «Был донъяла бөтә нәмә үтә, әммә изгелек һәм шиғриәт ҡала», — тигән. Ысындан да, алдан да әйтеп үтеүебеҙсә, шағирҙың күңел торошо үҙе үлгәс тә ҡала. Прозала ситтән ҡарау, күҙәтеү һәм баһалау өҫтөнлөк итә. Ә шиғриәттә һин яланғас.

**— Һин хәҙер байтаҡ йылдар «Башҡортостан ҡыҙы» журналын етәкләйһең. Шиғыр тыуҙырыу һымаҡ уҡ, журналдың һәр һанын бар итеү шундай уҡ иғтибар, мөхәббәт талап итәме, үҙе бер изге ғәмәлме һинең өсөн?**

— Шағирәлек өҫтөнлөк алғанда, эшләп тә йөрөү психологик яҡтан ауыр, әлбиттә. Баш мөхәррир кешеләр менән эшләй, көслө булырға

тейеш. Коллектив, халыҡ, төрлө кимәлдәге етәкселәр, зыялылар менән мөнәсәбәттәр ҡора ул. Тәнҡит тә ишетә. Эш барышында уңышһыҙлыҡтары булыуы ла ихтимал. Көндәлек тормошта быларҙың бөтәһен дә күтәрергә әҙер.

Шағирә булыу — икенсе. Ғәҙәти тормоштағы ҡалҡандарың юҡҡа сыға. Иҫһеҙерәк булып китәһең. Әйберҙәрең онотола, фекерең тарҡала. Ошо ҡыҙыҡтарҙы аҙаҡ көлөп иҫләйһең.

Бер яҡтан, етәксе булыу — ул ете кешенең хеҙмәтсеһе булыу. Үҙең етәксе, үҙең уҡыусыларҙың, халыҡтың, коллективыңдың хеҙмәтсеһе. Дөйөм алғанда, донъяға ҡарашыңды журнал аша ла белдерә алыу, халыҡ менән эшләү — тағы ла бер айырым бәхет. Мөхәррирлек — яҙмышымдың бүләге, тип уйлайым. Журналдың йөҙөн, йөкмәткеһен алдан уҡ тоҫмаллап күреү һәләте мөхәррир эшендә иң мөһимелер, тип иҫәпләйем.

Яуаплылыҡ та көслө. «Башҡортостан ҡыҙы»ның элек-электән килгән ҙур абруйы бар. Беҙгә тиклем эшләгән Кәтибә Кинйәбулатова, Фәүзиә Рәхимғолова, Рәми Ғарипов, Әнисә Таһирова, Гөлфиә Юнысова кеүек ҙур шәхестәр тыуҙырған абруйҙы төшөрөргә ярамай бит. Һәр бер эш шәхесте үҫтерә. Журналистика ла миңә күп яҡшы һыҙаттар өҫтәне. Ана, Марина Цветаева, китаптары сыҡмаһа ла, яҙғаны бер кемгә кәрәкмәһә лә, Францияла йәшәп ятһа ла, көн һайын станок артына баҫҡан кеүек, өҫтәл янына ултырған. Бәлки, ысынлап та, шағирә булып тыуғас (шулай уйларға баҙнат итәм), шиғриәткә мин дә шулай хеҙмәт итергә тейеш булғанмындыр. Әммә минең яҙмышым матбуғат менән тығыҙ бәйләнгән.

**— Йылдың ниндәй миҙгелен яҡын күрәһең?**

— Көҙҙө яратам. Тәүге китаптарымдың исемдәре лә — «Яуа-яуа алтын япраҡтар», «Һарғайма, йәй». Көҙ көнө, шулай уҡ февраль айында уңышлы яҙышам.

**— Ни өсөн һуңғы китабыңды «Елгә ҡаршы» тип атаның?**

— Башҡорт шиғриәтендә ел тураһында шиғырҙар бик аҙ. Бәлки, шуғалыр, илһамланып, елде, тәбиғәт күренеше булараҡ, төрлө яҡлап аса-аса, бер нисә шиғыр яҙып ташланым. Ябай ғына ел, ә тормоштоң үҙе кеүек үк сикһеҙ ҡөҙрәтле лә, шәфҡәтле һәм аяуһыҙ ҙа икән. Тик ҡаршы барғанда ғына уны бар булмышың менән тойорға, ҡайһы мәлдә, мәҫәлән, шифалы ямғыр тамсыларын ҡайҙалыр илткәндә, бер бөтөнгә әйләнеп, ҡыуаныстан тантана итергә йәки ниҙелер емергән, селпәрәмә килтергән саҡтарында ҡуша өҙгөләнергә һәм барса тойғоларҙы ижадҡа күсерергә мөмкин. Был — образлы һүҙбәйләнеш. Ел — ниндәйҙер дәрәжәлә йәшәү, ә мин тик шиғыр яҙғанда ғына уға ҡапма-ҡаршы киләм, уны тотошлайы менән күрер һәм нимәнелер, әлегәсә төшөнмәгәнемде, аңлар өсөн. Елгә ҡаршы, тимәк, күнегелгән ысынбарлыҡтың яңы бер яғын асырға тырышамдыр. Ә шағир өсөн был үтә лә мөһим бит: бөтә кеше берҙәй ҡайнаған донъяла бүтәндәр абайламаған нәмәне күреп ҡалырға, тоҫмалларға һәләтлеһеңме? Йә, иҫбатла үҙеңде, кинән йәки төңөл!

*Тамара Искәндәриә әңгәмәләште.*